Башҡортостан Республикаһы Ейәнсура районы муниципаль район
Байыш ауылы Ғайса Аҡманов исемендәге урта дөйөм белем биреү
мәктәбе муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһы

# Фәнни – эҙләнеү эшенең

# темаһы: *“Һәйкәлдәге исемдәр”*.

**Эштең йүнәлеше**: Великая Отечественная война в истории края и моей семьи.

Эште үтәне: 8-се класс уҡыусыһы

Йәркәева Илүзә Илһам ҡыҙы

Етәксеһе: I категориялы башҡорт теле

һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Йәркәев Миңлебай Әүхәҙи улы

Байыш – 2020.

**Йөкмәткеһе:**

I. Инеш.

II. Һәйкәлдәге исемдәр.

III. Һалдат медальонындағы исемдәр.

IV. Хәбәрһеҙ юғалған һалдаттар.

V. Еңеү менән ҡайтҡан яугирҙар.

## I. Инеш.

Моңһоу уйға батып әсә тора
Текәлгән дә һәйкәл ташына.
Яуҙа ятып ҡалған улын күреп
Һыйпағандай уның башынан.

- Буйың-һының һаман күҙ алдымда,
  “Мин ҡайтырмын, әсәй!” – тиеүең.
  Һине көтөп ҡартайып та киттем,
  Ә һин һаман шулай йәп-йәш көйөмө?
- Эйе, әсәй, беҙгә тура килде
  Ҡыҫка йәшен булып йәшнәргә,
  Тыуасаҡ көн, килер бәхет өсөн
  Мәңге шулай ҡалып йәшәргә.
  Һәйкәл эргәһендә әсә тора:
  Һөйләшәләр улар икәүләп:
- Даның ҡайтты, улым, йыраҡтарҙан,
  Ҡайҙа ятып ҡалды һуң кәүҙәң?

(Янбулатов Байгилде “Һәйкәл янында”.)

Бөйөк Ватан һуғышы йылдары кешелек хәтерендә уңалмаçлыҡ эҙҙәр ҡалдырҙы. Ул кемдеңдер ғәмһеҙ бала сағын урланы, кемделер һыңар аяҡ менән ҡайтарҙы, кемдеңдер ғүмерен өҙҙө. Был ҡәһәрле һуғыш әҙәм балаһының кескәй генә шатлыҡтарын, оло өмөттәрен юҡҡа сығарҙы. Быйыл Бөйөк Еңеүгә 75 йыл тула. Бөйөк Ватан һуғышы беҙҙән алыçлашҡандан алыçлаша. Ләкин халҡыбыҙҙың фашист Германияһына ҡаршы көрәштәге тиңһеҙ батырлығы үлемһеҙ.

Беҙҙең быуын Бөйөк Ватан һуғышы тураһында кинофильмдар , китаптар аша ғына белә. Йәш быуын һуғыштың тарихын, илебеҙҙе фашизмдан азат иткән батыр яҡташтарыбыҙҙы белергә тейеш.

2015 йылда Аҡдәүләт ауылында шәжәрә байрамы үтте. Байрамдың ныҡ тулҡынландырған өлөшө - Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған һалдаттарға һәйкәл асыу булды. Һәйкәлдә яуға киткән 34 ир-егеттең исем-шәрифтәре. Утыҙ дүрт уҙаман. Кемдеңдер улы, ире, атаһы, ағаһы, олатаһы, ҡартатаһы...

Һуғыш башланғанда Аҡдәүләт ауылында 40 өй булған. Ошо бәләкәй генә ауыл үҙенең 34 типһә тимер өҙөрлөк көслө, имәндәй ныҡлы улдарын һуғышҡа оҙатҡан.

Исемдәр, исемдәр... 34 исем. Һәр исем – ул үҙе бер тарих. Һәр исем тыуған илгә һөйөү, батырлыҡ тураһында һөйләй. Һәйкәлгә яҡыныраҡ килеп, исемдәрҙе барлайым: Айсыуаҡовтар, Янбулатовтар, Гуляевтар, Йәркәевтар, Ялчиндар, Рәхимғоловтар...

Ә мин ошо һалдаттарҙың һуғышта күрһәткән батырлыҡтары, уларҙың яу юлы тураһында нимә беләм? Ә башҡалар нимә белә? Һәм мин был теманың проблемалы, **актуаль** булыуына иғтибар иттем.

**Тикшеренеү объекты:**

Аҡдәүләт ауылынан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугирҙарҙың фронт юлы, батырлығы.

**Тикшеренеү предметы**:

Аҡдәүләт ауылынан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан һвлдаттарҙың биографияһы, иҫтәлектәр.

**Тикшеренеү эшенең маҡсаты:**

Аҡдәүләт ауылынан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан кешеләрҙең үткәнен өйрәнеү һәм киләсәк быуындарға еткереү, уларҙың батырлығын мәңгеләштереү.

**Тикшеренеү эшенең бурыстары:**

1. Яугирҙарҙың яҙмышын асыҡлау маҡсатында ауылдың өлкән быуын кешеләре менән осрашыу.
2. Бөйөк Ватан һуғышы тарихын өйрәнеү өсөн ауыл китапханаһынан, мәктәп музейынан, интернеттан материалдар эҙләү.

**Теоретик әһәмиәте:**

Бәләкәй генә Аҡдәүләт ауылы кешеләренең яҙмышы ил яҙмышы менән тығыҙ бәйләнгән. Ошо яугирҙәрҙең исемдәрен йәш быуын белергә тейеш. Әгәр был батыр һалдаттарҙың исемдәре быуындан-быуынға күсә килһә, улар беҙҙең хәтерҙә мәңге йәшәйәсәк. Уларҙың батырлыҡтары онотолмаясаҡ.

**Практик әһәмиәте:**

Ошо эште башҡарғанда мин кешеләр менән аралашырға, әңгәмәләшергә өйрәндем. Һәр быуын Бөйөк Ватан һуғышының тарихын, еңеү яулаған кешеләрҙе белергә тейеш. Был һәр кемдең изге бурысы.

**Тикшеренеү барышында ҡулланылған методтар:**

1. Эҙләнеү.
2. Интервью.
3. Күҙәтеү.

**Эштең структураһы:**

Эш инеш өлөштән, өс бүлектән, ҡушымтанан, ҡулланылған әҙәбиәттән тора.

**Тикшеренеү эшенең яңылығы:**

Аҡдәүләт ауылының хәбәрһеҙ юғалған яугирҙарының яҙмышын өйрәнеү.

## II. Һәйкәлдәге исемдәр.

**Һәйкәлдәге 34 кешенең ун бише – Янбулатовтар:**

1.Янбулатов Абдулхаҡ Имамитдин улы

2. Янбулатов Әхмәтйән Мөхәмәтйән улы

3. Янбулатов Байсәләм Әбделғәни улы

4. Янбулатов Ғәпсәләм Әбделғәни улы

5. Янбулатов Байбулат Ишдәүләт улы

6. Янбулатов Исмәғил Дилмөхәмәт улы

7. Янбулатов Мырҙагәрәй Шәйхетдин улы

8. Янбулатов Сафагәрәй Ҡолмөхәмәт улы

9. Янбулатов Хөснөлхаҡ Хужамөхәмәт улы

10. Янбулатов Шакир Бикмәхәмәт улы

11.Янбулатов Шәрифулла Мырҙамөхәмәт улы

12.Янбулатов Әхмәҙулла Сибәғәт улы

13. Янбулатов Лотфулла Сибәғәт улы

14.Янбулатов Муллағәлләм Мырҙамәхәмәт улы

15. Янбулатов Ишбулат Ишдәүләт улы.

Янбулатовтарҙан **4 кеше** тыуған яҡтарына еңеү менән ҡайтҡан. **11** кеше һуғышта һәләк булған**. Ун бер** кешенең **етеһе** хәбәрһеҙ юғалған.

**Гуляевтарҙан 9 кеше һуғышҡа киткән**:

1.Гуляев Әхмәткирәй Хөсәйен улы

2.Гуляев Ҡотлоғужа Ғәлиәхмәт улы

3. Гуляев Ноғоман Нияз улы

4. Гуляев Сәлмән Янмырҙа улы

5. Гуляев Сәғәҙәткирәй Янмырҙа улы

6. Гуляев Хужагилде Мырҙағәли улы

7. Гуляев Дәүләткилде Нияз улы

8. Гуляев Ишморат Нияз улы

9. Гуляев Мырҙагилде Мырҙағәле улы.

Гуляевтарҙан **ике кеше** һуғыштан әйләнеп ҡайтҡан. **Ете** кеше һуғышта һәләк булған. **Шуларҙан алты кеше хәбәрһеҙ юғалған**.

**Ялчиндарҙан – 3:**

1. Ялчин Солтанғәле Ишғәли улы
2. Ялчин Хажиғәле Мөхәмәтғәле улы
3. Ялчин Сафарғәле Мөхәмәтғәле улы.

**Ялчиндарҙан бер** кеше иҫән-һау ҡайтҡан, **ике яугир** хәбәрһеҙ юғалған.

**Йәркәевтарҙан** 2 кеше фронтҡа китә.

Йәркәев Мөхәмәҙи Әхмәҙи улы һуғыштан еңеү менән ҡайтҡан, ә Йәркәев Абдулла Дәүләтша улы хәбәрһеҙ юғалған.

Абдуллиндарҙан 1 кеше һуғышта ҡатнаша. Абдуллин Иҙрис Яхъя улы.

Айсыуаҡовтарҙан 2 кеше ҡатнаша. Икеһе лә һуғышта һәләк була. Айсыуаҡов Ниғмәтулла Зәйниғәбдин улы

Рәхимғоловтарҙан, Иҙелбаевтарҙан берәр кеше һуғышта ҡатнаша.

34 яугирҙың 23 һуғышта һәләк булған.

**Ошо 23 кешенең тик бишәүһенең генә ҡайҙа ерләнгәне билдәле**. Бер туғандар Янбулатов Байсәләм Әбделғәни улы һәм Янбулатов Ғәпсәләм Әбделғәни улының, Янбулатов Хөснөлхаҡ Хужамәхәмәт улының , Гуляев Мырҙагилде Мырҙағәле улының һәм Айсыуаҡов Ғиззәтулла Зәйниғәбдин улының ҡәберҙәре билдәле.

**Аҡдәүләт ауылынан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан 34 кеше араһында бер генә офицер. Ул - Янбулатов Ғәпсәләм Әбделғәни улы.**

Янбулатов Ғәпсәләм 1940 йылдың 3 октябрендә армия сафына алына. Ғәпсәләм Әбделғәни улы менән бергә Аҡдәүләттән Гуляев Ишморат Нияз улы, Гуляев Сәлмән Янмырҙа улы, Гуляев Хужагилде Мырҙағәле улы, Ялчин Хажиғәле Мөхәмәтғәле улы хәрби хеҙмәткә китә. Ә бер йылдан һуғыш башлана. Янбулатов Ғәпсәләм Аҡдәүләт ауылынан һуғышҡа киткән яугирҙар араһында берҙән-бер офицер. Ул лейтенант була. Ғәпсәләм Әбделғәни улы 2-се Украина фронтының 38-се уҡсылар дивизияһының 48-сы уҡсылар полкында хеҙмәт итә. 7-се уҡсылар ротаһы командиры Янбулатов Ғ.Ә. һуғышта күрһәткән батырлығы өсөн 1944 йылдың 22 мартында Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән наградлана. 2-се Украина фронты буйынса сыҡҡан Приказ № 05-н. (Ҡушымта 1,2).

Батыр яҡташыбыҙ Янбулатов Ғәпсәләм Әбделғәни улы 1944 йылдың 23 апрелендә Румынияла һәләк була. Ул Румыниялың Брустурий-Резеш ауылында ерләнгән.

Ә Ғәпсәләм Әбделғәни улының бер туған ҡустыһы Байсәләм Әбделғәни улы фронтҡа 1942 йылдың 18 авгусында алына. Байсәләм Янбулатов Ленинград ҡалаһы өсөн барған һуғыштарҙа ҡатнаша. Синявин бейеклектәре... Волхов һәм Ленинград фронттарының - алғы һыҙығы. Синявин бейеклектәре, унаң эргәһендәге һаҙлыҡтарҙа ҙур һуғыштар була. 1943 йылдың ғинуар айында Ленинград блокадаһын өҙгәндән һуң да Синявин бейеклектәрендә һуғыштар дауам итә.

Бына ошо Синявин бейеклектәрендә барған һуғыштарҙа 1943 йылдың 30 ғинуарында яҡташыбыҙ Янбулатов Байсәләм Әбделғәни улы батырҙарса һәләк була. Ул Ленинград өлкәһе Мгинск районында ерләнә. Мин Янбулатов Байсәләм тураһында бик ҡыҙыҡлы документ таптым. **2005 йылдың апрель айында Байсәләм Әбделғәни улының һалдат медальоны һәм шәхси әйберҙәре табыла. Бына был яҙыу һалдаттың медальонында табылған, ҡайһы бер хәрефтәр юйылған:**

**ЯНБУЛАТОВ Байсмян (Байсалям) (установлен из медальона и архивных списков по именной вещи Н.И.Замотина). Родился: 1924 г., Башкирская обл., Зимгурский р-н, д.Охдувлет. Призван Зимлегурским РВК, Башкирской АССР. Красноармеец, стрелок, 218 сп, 80 сд. Семья: Янбулатова Гаанада, адрес тот же.**

Янбулатов Байсәләмдең медальоны һәм шәхси әйберҙәрен Коломна ҡалаһынан "Суворов", Санкт-Петербургтан "Уголек" отрядтары таба. Яҡташыбыҙ Синявин мемориалына ерләнә.

**Архив: ЦАМО, вх. дон. 5434с-43г.: убит 30.1.1943. Найден: апрель 2005 г., Ленинградская обл., Кировский р-н, д.Пильная Мельница. Захоронен: 8.5.2005 г., Ленинградская обл., Кировский р-н, мемориал «Синявинские высоты». Отряд: «Суворов», г. Коломна Московской обл., «Уголек», г. Санкт-Петербург**. (Ҡушымта 3.)

Гуляев Мырҙагилде Мырҙағәле улы 1943 йылда батырҙарса һәләк була. Ул  Полтава өлкәһе Миргород районы Обуховка ауылында ерләнгән. Ә Янбулатов Хөснөлхаҡ Хужамөхәмәт улы 1944 йылдың 8 ноябрендә госпиталдә вафат була. Ул Ровенск өлкәһе Верба районы Верба ауылында ерләнгән. Айсыуаҡов Ғиззәтулла Зәйниғәбдин улы- 160 гвардия уҡсылар полкының 54 уҡсылар дивизияһы рядовойы. 1943 йылдың 9 сентябрендә батырҙарса һәләк була.  Ул хәҙерге Донецк өлкәһе  (элекке Сталин өлкәһе) Ольгин районы Первый хуторында ерләнгән.

### III. Хәбәрһеҙ юғалған һалдаттар.

Аҡдәүләт ауылынан һуғышҡа киткән **34 яугирҙың 18** хәбәрһеҙ юғалған.

Бәләкәй генә ауылдан – 18 кеше! Әлеге көндә **Башҡортостанда 127 400** һалдат хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә, **Рәсәй буйынса – 1 миллион 783,3 мең кеше**.
Бөйөк Ватан һуғышында атаһын, олатаһын, ир йәки ҡыҙ туғандарын юғалтмаған ғаиләләрҙе осратыуы һирәк. Һуғыш ғәрәсәте тотош быуындар иңенә оло һынау булып яткан,үкенесле етемлек мөһөрө һуҡҡан. Атайҙары яу ҡырында ятып ҡалған күпме баланың ауыр бала сағы өсөн йәне әрней, яуға оҙатып та улдарын иҫән килеш көтөп ала алмаған, ҡайтырҙарын йылдар буйына көткән әсәләр, тол ҡатындарҙың ҡайғылары йөрәктәренә таш булып ятҡан хәҙер. “Хәбәрһеҙ юғалған” тигән әҙәм балаһының һөйәктәрен төйәк иткән ер билдәһеҙ ҙә булмаҫҡа тейеш кеүек. Ғәзиз кешеләренең һуғышта ҡайһы урында һәләк булыуын, ерләнеүен йылдар буйына эҙләгән кешеләр бар.

Хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә беренсе **Айсыуаҡов Ниғмәтулла Зәйниғәбдин улы** тора. Ул 1942 йылдың 17 февралендә һуғышҡа алына. Беҙҙең Ейәнсура районы буйынса сыҡҡан  **“Хәтер” китабында** Айсыуаҡов Ниғмәтулла 1942 йылдың октябрь айында хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә. Башҡортостан Республикаһы буйынса

сыҡҡан китапта ла шундай уҡ мәғлүмәт. Ә **“Халыҡ хәтере” (“Память народа”)** сайтында гвардия рядовойы **Айсыуаҡов Ниғмәтулла Зәйниғәбдин улы 1944 йылдың 28 августында Валя – Узулуй районында (Трансельванияла) күрһәткән батырлығы өсөн “Батырлыҡ өсөн” миҙалы (медаль “ За отвагу”) менән наградланды тип яҙылған. “Хәтер” китабында Айсыуаҡов Ниғмәтулла Зәйниғәбдин улы тип, ә миҙал менән наградлау тураһындағы 233 гвардия ҡыҙыл байраҡлы уҡсылар полкы 81 гвардия ҡыҙыл байраҡлы уҡсылар дивизияһының 1944 йылдың 7 октябрендә сыҡҡан 033/н һанлы приказында Айсыуаҡов Ниғмәтулла Зәйнәғәт улы тип яҙылған.** 1942 йылдың октябрь айында хәбәрһеҙ юғалған кеше 1944 йылдың октябрь айында миҙал менән наградланған. Мин йыйған материалдарҙы тикшереп сағыштырып ҡараным. Тыуған ере - Ейәнсура районы Аҡдәүләт ауылы, тыуған йылы – 1908. Тап килә. Ошо һорауҙарыма яуап табыу маҡсатында мин Аҡдәүләт ауылында йәшәүсе Айсыуаҡов Хөснулла Ниғмәтулла улы менән осраштым. Ул Ниғмәтулла Зәйниғәбдин улының өлкән улы. Хөснулла Ниҡмәтулла улы атаһынан килгән хаттарҙың 1944 йылда туҡтауы тураһында һөйләне. Тимәк, Айсыуаҡов Ниғмәтулла Зәйниғәбдин улы 1944 йылда һәләк булған. (Ҡушымта 4,5).

**Шулай уҡ хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә Гуляев Ноғоман Нияз улы**. Ул 1925 йылда Аҡдәүдәт ауылында тыуған. 1943 йылдың декабрь айында һуғышҡа алына. 1944 йылдың июль айында хәбәрһеҙ юғала. Был мәғлүмәт Башҡортостан буйынса сыҡҡан “Хәтер” китабынан алынды. Гуляев Ноғоман улының бер туған ағаһы Гуляев Ишморат Нияз улы һуғыштан ҡайтҡас, ҡустыһын эҙләп төрлө ерҙәргә хат яҙа. Уға ошо документты ғына ебәрәләр. Был документта Гуляев Ноғоман Нияз улының 1-се Беларуссия фронтының 415 уҡсыдар дивизияһы 1326 уҡсылар полкында һуғыш юлы үткәне әйтелгән. Ләкин ҡайҙа һәләк булғаны билдәле түгел. Ноғоман Нияз улы һаман да хәбәрһеҙ юғалғандар исемлегендә. (Ҡушымта 6).

Бөйөк Ватан һуғышында **хәбәрһеҙ юғалған Гуляев Сәлмән Янмырҙа улы** Аҡдәүләт ауылында 1920 йылда тыуған. Ул 1940 йылдың 2 октябрендә совет армияһы сафына алына. Һуғыштың тәүге көндәренән фронтта. Отделение командиры Сәлмән Янмырҙа улы 1941 йылдың 9 декабрендә "Ҡыҙыл Октябрь" совхозы эргәһендә ҙур батырлыҡ күрһәтә. "Взвод , минең арттан!"- тип дошманға ҡаршы ташлана. Шулай итеп, Гуляев Сәлмән Янмырҙа улы дошман пехотаһын ҡасырға мәжбүр итә һәм уларға 71-се полктың тылына үтеп инергә ҡамасаулай Һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн 1943 йылдың ғинуар айында "Хәрби хеҙмәттәре өсөн" миҙалы менән наградлана. Ул 1942 йылдың ноябрь айында хәбәрһеҙ юғала. Яугирҙың наградаһын туғандарына ебәрәләр. (Ҡушымта 7,8.)

Олатайым Йәркәев Абдулла Дәүләтша улы ла һуғышта хәбәрһеҙ юғалған. Ул 1901 йылда тыуған. 1941 йылдың июль айында Бөйөк Ватан һуғышына киткән. Ул Ленинград фронтында хеҙмәт итә. 1942 йылдың август айында хәбәрһеҙ юғалған. Башҡортостан Республикаһы, Ейәнсура районында сыҡҡан "Хәтер" китаптарындағы һәм "Халыҡ хәтере" сайтындағы мәғлүмәттәр тап килә.(Ҡушымта 9).

**Янбулатов Байбулат Ишдәүләт улы** Аҡдәүләт ауылында 1926 йылда тыуған. Ул 1943 йылдың 18 ноябрендә һуғышҡа алына, уға 17 йәш була. Һуғышта күрһәткән батырлығы өсөн Янбулатов Байбулат Ишдәүләт улы III дәрәжә Дан ордены менән наградлана. 1-се Украина фронты 10 гвардия танк корпусы буйынса сыҡҡан приказ - № 17/н. (Ҡушымта 10).

Янбулатов Байбулат Ишдәүләт улы 1945 йылдың апрель айында хәбәрһеҙ юғала.

**Янбулатов Шәрифулла Мырҙамөхәмәт улы** 1908 йылда Аҡдәүләт ауылында тыуған. Коммунист. 1937-1939 йылдарҙа Байыш ауыл советының рәйесе була. 1940 йылда уны Сирғол ауылына колхоз рәйесе итеп ебәрәләр. 1941 йылдың 22 июнендә ул Иҫәнғолға кәңәшмәгә китә. Ләкин төштән һуң атын ҡара тиргә төшөрөп ҡайтып

төшә. Ҡатыны Сабира еләккә киткән була. “Балалар, һуғыш башланған, мин фронтҡа китәм,”- ти. 13 йәшлек Фәтхулла илай-илай әсәһен эҙләп алып ҡайта. Шәрифулла Мырҙамөхәмәт улы ғаиләһе менән сәй эсеп кенә өлгөрә. Саҙалынан атҡа тейәлгән ир-егеттәр килеп төшә.. Ул Ленинград фронтында була. Шәрифулла Мырҙамөхәмәт улы 1942 йылдың май айында хәбәрһеҙ юғала.(Ҡушымта 11).

**1942 йылда 9 кеше, 1943 йылда 6 кеше, 1944 йылда 1 кеше, 1945 йылда 2 кеше хәбәрһеҙ юғалған**.

## IV. Еңеү менән ҡайтҡан һалдаттар.

11 һалдат еңеү менән тыуған яҡтарына ҡайта.

**Гуляев Ишморат Нияз улы** 1920 йылдың 20 декабрендә Аҡдәүләт ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1940 йылдың көҙөндә Аҡдәүләт ауылынан 5 егет: Хужагилде, Сәлмән һәм Ишморат Гуляевтар, Хажиғәли Ялчин һәм Ғәбсәләм Йәнбулатов хәрби хеҙмәткә алыналар.

Гуляев Ишморат Нияз улы Финляндия сигендә хеҙмәт итә. Ул саңғыла шәп йөрөй, шуның өсөн уны саңғысылар батальонына ебәрәләр.

1941 йылдың апрелендә уларҙың дивизияһын көнбайышҡа күсерәләр. Ишморат Нияз улы тәүге сирҡанысты Смоленск йүнәлешендәге һуғыштарҙа ала. 1942 йылдың ғинуарынан 17 июненә тиклем Харьков йүнәлешендәге һуғыштарҙа ҡатнаша. Артабан - Курск дуғаһы. 1943 йылдың майынан алып Ишморат Нияз улы Брянск, Гомель ҡалаларын, Белоруссияны тулыһынса, аҙаҡ Польшаның баш ҡалаһы Варшаваны азат итеүҙә ҡатнаша. Еңеүҙе Берлинда ҡаршылай. Ишморат Нияз улын Германиялағы совет ғәскәрҙәре төркөмөндә ҡалдыралар. Ул Потсдам конференцияһын һаҡлауҙа ҡатнаша. 1946 йылдың аҙағында Ишморат Нияз улын бер төркөм һалдаттар менән бергә Украиналағы бандеровсыларға ҡаршы көрәшеүсе НКВД часына ебәрәләр. Бында ике йылға яҡын хеҙмәт итә. Тыуған ауылына һигеҙ йыл үткәс кенә аяҡ баҫа. 1940 йылдың 3 октябрендә армияға киткән 5 егеттән бер үҙе тыуған ауылына ҡайта.

Фронтта күрһәткән батырлыҡтары өсөн II дәрәжә бөйөк Ватан һуғышы ордены, «За оборону Сталинграда», «За взятие Берлина», «За

освобождение Варшавы», «За Победу над Германией» миҙалдары менән наградлана.
Һуғыштан ҡайтҡас та ул колхоздың урман ҡырҡыу, хужалыҡты тергеҙеү, ауылды төҙөкләндереү кеүек бөтмәҫ-төкәнмәҫ эшенә егелә.

5. **Йәркәев Мәхәмәҙи Әхмәҙи улы**.
Ҡартатайым Йәркәев Мөхәмәҙи Әхмәҙи улы 1901 йылда Аҡдәүләт ауылында тыуған. Һуғыштың тәүге көндәренән фронтта. Гвардия ефрейторы Йәркәев М.Ә. сапер була.
Һуғыштың тәүге көндәре... Ауыр һуғыштар бара. Беҙҙең ғәскәрҙәр сигенә. Бер ваҡыт Мөхәмәҙи Әхмәҙи улы һуғышта ике туған ҡустыһы Абдулла Йәркәевты осрата. Абдулла хеҙмәт иткән дивизия һөжүм башларға тейеш була. Улар бер -береһенә һүҙ бирәләр: кем дә кем тере ҡайта, шул ғаиләләренә ярҙам итә.
Йәркәев М.Ә. Ленинград фронтында 314-се саперҙар полкында хеҙмәт итә. 1942 йылда ул ҡаты яралана. Госпиталдән сыҡҡас уны 115-се саперҙар полкына ебәрәләр. Калинин йүнәлешендәге һуғыштарҙа ул контузия ала.
1944 йылдан 14-се сапер полкында сапер булып хеҙмәт итә. Буг, Висла йылғалары аша понтон күперҙәр төҙөүҙә ҡатнаша. Буг, Висла йылғаларын кисеүҙә күрһәткән батырлығы өсөн гвардия ефрейторы Йәркәев М.Ә. «Батырлыҡ өсөн» миҙалы менән наградлана. Ул Варшаваны азат итеүҙә күрһәткән батырлығы өсөн «За освобождение Варшавы» миҙалы менән наградлана. Шулай уҡ уның «За взятие Берлина», «За Победу над Германией» миҙалдары бар. (Ҡушымта 12,13,14).
Йәркәев Мөхәмәҙи Әхмәҙи улы һуғыштан 1945 йылдың июль айында ҡайта. Алған яраларынан ул 1955 йылда вафат була.

**Янбулатов Муллағәләм Мырҙамөхәмәт улы** 1913 йылда Аҡдәүләт ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышына ул 1942 йылда китә. Муллағәләм Мырҙамөхәмәт улы 112-се башҡорт атлы дивизияһы составында данлы юл үтә. Һуғышта күрһәткән батырлығы өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены, миҙалдар менән наградлана. 1945 йылдың сентябрь айында тыуған яҡтарына ҡайтып төшә. Тәүҙә колхозда, унан һуң Ейәнсура совхозында эшләй. 1976 йылда вафат була. (Ҡушымта 15).
**Рәхимғолов Ишморат Баязит улы** 1926 йылда тыуған. Һуғышҡа уны 1943 йылда алалар. Ишморат Баязит улы Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт

итә. Японҙарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. 1951 йылда сержант званиеһында тыуған ауылы Аҡдәүләткә ҡайтып төшә.

**Алыҫ Көнсығышта шулай уҡ Янбулатов Ишбулат Ишдәүләт улы ла** хеҙмәт итә.

Ул 1924 йылда тыуған. Һуғышҡа 1942 йылдың 7 сентябрендә алынған. Һауа көстәренә ҡаршы ғәскәрҙең зенит-артилллерия полкында хеҙмәт итә. Орудие номеры — 85 мм. Хәрби антты 26 декабрь 1942 йылда 13 диңгеҙ флотының 1 зенит-артиллерия полкында бирә. Хәрәкәт итеүсе Армия составында (28.08.1945- 03.08.0945) японҙарға ҡаршы һуғыштарҙа ҡатнаша. Тыуған яҡтарына 1947 йылда ҡайта.

**Йомғаҡлау.**

Бөйөк Ватан һуғышы йылдары кешелек хәтерендә уңалмаҫлыҡ эҙҙәр ҡалдырҙы. Ул кемдеңдер ғәмһеҙ бала сағын урланы, кемделер һыңар аяҡ менән ҡайтарҙы, кемдеңдер ғүмерен өҙҙө. Был ҡәһәрле һуғыш әҙәм балаһының кескәй генә шатлыҡтарын, оло өмөттәрен юҡҡа сығарҙы. Быйыл беҙ Бөйөк Еңеүҙең 73 йыллығын билдәләйәсәкбеҙ. Бөйөк Ватан һуғышы беҙҙән алыҫлашҡандан алыҫлаша. Ләкин халҡыбыҙҙың фашист Германияһына ҡаршы көрәштәге тиңһеҙ батырлығы үлемһеҙ.

Беҙҙең быуын Бөйөк Ватан һуғышы тураһында кинофильмдар , китаптар аша ғына белә. Йәш быуын һуғыштың тарихын, илебеҙҙе фашизмдан азат иткән батыр яҡташтарыбыҙҙы белергә тейеш.

Бөгөнгө көндә Байыш ауыл биләмәһендә 2 генә ветеран ҡалды. Улар Дәүләтшин Аҡмулла һәм Дәүләтшин Әюп олатайҙар. Ә башҡа ауылдарҙа ветерандар юҡ. Байыш ауыл советына ҡараған бөтә ауылдарҙа ла Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан яугирҙарға һәйкәл ҡуйылды. Был һәйкәлдәр – беҙҙең хәтер. Фашизмды еңгән һалдаттар һәр саҡ беҙҙең менән.

## Ҡулланылған әҙәбиәт:

1. “Память” списки погибших в Великой Отечественной войне 1941 – 1945 г.г. Книга десятая. Республика Башкортостан. Уфа, “Китап”, 1996.
2. “Память” списки погибших в Великой Отечественной войне 1941 – 1945 г.г. Зианчуринский район.
3. Түләбаев М. Йәнтөйәктең хәтер хазинаһы. Өфө: Матбуғат донъяһы ДУ нәшриәте, 2008.
4. “Халыҡ хәтере” сайты материалдары.
5. “Obd memorial” сайты материалдары.
6. Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте дәреслеге.
7. Тыуған яҡты өйрәнеү музейының материалдары.
8. Мәктәп музейы, ауыл китапханаһы материалдары.

## Кушымта 1



Вх 24018
2 укр фр
к01921

Секретно.
Экз. № 2

925

**П Р И К А З**

**38 СТРЕЛКОВОЙ ДИВИЗИИ 40 АРМИИ 2-го Украинского фронта.**

" 22 " марта 1944 года № 05-н Действующая Армия.

От имени Президиума Верховного Совета Союза ССР, за образцовое выполнение боевых заданий Командования на фронте борьбы с немецкими захватчиками и проявленные при этом доблесть и мужество НАГРАЖДАЮ:

**Орденом " КРАСНАЯ ЗВЕЗДА"**

1. Старшего сержанта ВЕРЕСНЕВУ Оксану Павловну — Начальника радиостанции 703 отдельной роты связи.
2. Старшего военфельдшера ВОЛОБУЕВА Григория Ивановича — Командира санитарной роты 343 стрелкового полка.
3. Капитана МИРОНЮК Василия Филипповича — Адъютанта командира 38 стрелковой дивизии.
4. Младшего лейтенанта ШУМИЛИНА Василия Арсеновича — Командира стрелкового взвода 48 стрелкового полка.
5. Лейтенанта ЯНБУЛАТОВА Кепсялама — Командира 7 стрелковой роты 48 стрелкового полка.

**Орденом "СЛАВА 3 СТЕПЕНИ"**

1. Младшего сержанта [illegible]ШЕВА Ивана Васильевича — Командира отделения пулеметной роты 29 стрелкового полка.

**Медалью " ЗА ОТВАГУ "**

1. Без звания БУРАКА Прокопа Федоровича — Колхозника села Софиевка Ризинского с/совета.
2. Старшего военфельдшера ГАБРИЕЛЬЯНА Тиграна Атаевича — Старшего военфельдшера санитарной роты 343 стрелкового полка.
3. Старшего лейтенанта медслужбы ДЕЙКУН Ульяну Самсоновну — Командира санитарного взвода 48 стрелкового полка.
4. Младшего лейтенанта МИТРОФАНОВА Георгия Ивановича — Командира 4 стрелковой роты 343 стрелкового полка.
5. Младшего лейтенанта САФОНКИНА Василия Федоровича — Командира взвода 76 мм пушек 343 стрелкового полка.

Командир 38 стр. дивизии
гвардии - полковник / [illegible] /

Начальник штаба дивизии
подполковник: / СОЛОМОН /

Отпеч. 3 экз.
экз. № 1 През. Верх. Сов.
экз. № 2 ГУК НКО
экз. № 3 в деле.

**Ҡушымта 2**



**Ҡушымта 3.**

**Һалдат медальонындағы исем.**

**2005 йылдың апрель айында Янбулатов Байсәләм Әбделғәни улының һалдат медальоны һәм шәхси әйберҙәре табыла. Бына был яҙыу һалдаттың медальонында табылған, ҡайһы бер хәрефтәр юйылған:**

**ЯНБУЛАТОВ Байсмян (Байсалям) (установлен из медальона и архивных списков по именной вещи Н.И.Замотина). Родился: 1924 г., Башкирская обл., Зимчуринскийский р-н, д.Ахдувлет. Призван Зимчуринским РВК, Башкирской АССР. Красноармеец, стрелок, 218 сп, 80 сд. Семья: Янбулатова Гаанада, адрес тот же.**

Янбулатов Байсәләмдең медальоны һәм шәхси әйберҙәрен Коломна ҡалаһынан “Суворов”, Санкт-Петербургтан “Уголек” отрядтары таба. Яҡташыбыҙ Синявин мемориалына ерләнә.

**Архив: ЦАМО, вх. дон. 5434с-43г.: убит 30.1.1943. Найден: апрель 2005 г., Ленинградская обл., Кировский р-н, д.Пильная Мельница. Захоронен: 8.5.2005 г., Ленинградская обл., Кировский р-н, мемориал «Синявинские высоты». Отряд: «Суворов», г. Коломна Московской обл., «Уголек», г. Санкт-Петербург**.

## Ҡушымта 4.



# Приказ

233 гвардейскому Стрелковому краснознаменному полку 81 гвардейской Стрелковой Красноградской краснознаменной Дивизии.

„7." Октября 1944 года **№ 033/н** Действующая Армия

От Имени Президиума Верховного Совета Союза ССР — награждаю:

## Медалью „За Отвагу"

1. Стрелка 1-стрелкового батальона — гвардии красноармейца АЙСУВАКОВА Нигамат Зайнагатов. Ранее не награжденного.

В бою 28-августа 1944 года в районе Селения Валя-Узулуй (трансильвания) Действовал в составе своего подразделения смело и решительно вел активный огонь из своей винтовки по контратакующему противнику. и истребил 3х вражеских Солдат. В этом бою т. Айсуваков был ранен.

1908 года рождения, беспартийный, башкир. Призван в РККА Зилаирским РВК — Баш АССР Домашний адрес: [illegible]

2. Пулеметчика 1-стрелкового батальона — гвардии красноармейца БОНДАРЕНКО Николая Павловича Ранее не награжденного.

В бою 28-августа 1944 года в районе Селения Валя-Узулуй (трансильвания) Проявил мужество и отвагу, действовал в составе своего подразделения по отражению контратаки, где огнем из своего пулемета истребил 5-вражеских солдат. В этом бою т. Бондаренко был ранен.

192[illegible] года рождения, член ВЛКСМ, Украинец, призван в РККА. П-Бодским РВК — Кировоградской области. Домашний адрес. [illegible]

3. Связиста 1-стрелкового батальона — гвардии красноармейца БОГНЮК Якима Васильевича — Ранее не награжденного.

В бою 28-августа 1944 года в районе селения Валя-Узулуй (трансильвания) проявил отвагу и мужество, под сильным огнем противника устранил 3-порыва на линии, чем самым способствовал выполнению боевой задачи. В этом бою т. Богнюк был ранен.

1900 года рождения, беспартийный, Украинец. Призван в РККА Троицким РВК, одесской области. Домашний адрес. [illegible]

4. Стрелка 1-стрелкового батальона — гвардии красноармейца БЕЛИНСКОГО Ефима Федоровича. — Ранее не награжденного.

В бою 28 августа 1944 года в районе селения Валя-Узулуй (трансильвания) действовал вместе со своим подразделением с отвагой и мужеством отражал контратаку противника и истребил огнем из своей винтовки 8х вражеских солдат. В этом бою т. Белинский был ранен.

1900 года рождения, беспартийный, Украинец, призван в РККА.

**Ҡушымта 6**



77

84720
30 10 57

АНКЕТА

На разыскиваемого военнослужащего с которым потерялась письменная связь в период Великой Отечественной войны 1941-1945 гг. по Зианчуринскому райвоенкомату БАССР

| | |
|---|---|
| 1. Фамилия, имя и отчество разыскиваемого | Гуляев Нугуман Ниязович |
| 2. Год рождения | 1925. |
| 3. Место рождения, область, район с/совет, деревня, город | БАССР Абзановский район Баишевский с/с дд. Акдавлетово |
| 4. Каким райвоенкоматом призван, когда в какую часть и когда направлен | Зианчуринским РВК БАССР 26. января 1943 года. |
| 5. Военное звание | Рядовой |
| 6. Занимаемая должность в Сов. Армии | Стрелок-автоматчик |
| 7. Когда прекратилась письменная связь | 1 апреля 1943 года. |
| 8. Воинский адрес по последнему письму | 415 Стрелковая дивизия 1326 стрелковой полк. 1й белорусский фронт. |
| 9. Где проживал до призыва, область район, с/совет, деревня, город | БАССР Абзановский район Баишевский с/с дд. Акдавлетово |
| 10. Дополнительные данные о разыскиваемом, письма товарищей, сообщение и др. | Данных нет. |
| 11. При наличии сведений о гибели указать, где, когда, дата и место похорон | Сведений о г/сл. нет |
| 12. Кто разыскивает, фамилия, имя отчество заявителя | Гуляева Хадиса Хибатулловна |
| 13. Родственное отношение заявителя к разыскиваемому, отец, жена, дети и т.т.д. | Мать |
| 14. Подробный адрес местожительства. обл., район с/совет, деревня, город | БАССР Абзановский район Баишевский с/с дд. Акдавлетово |
| 15. Личное заключение военкома по материалам, в/с погиб, умер пропал без вести | Можно считать пропал без вести в мае м-це 1943 года. |
| 16. ПРИЛОЖЕНИЕ | нет. |

Зианчуринский райвоенком
капитан: /Воробьев/

87б III 43

# Ҡушымта 7



| | |
|---|---|
| 35. Ефрейтора ГУЛЯЕВА Сальмана Янмурзиновича. | Командира отделения 64 отдельного батальона охраны штаба 54 армии. |
| 36. Красноармейца ГУСЕВА Михаила Филипповича. | Разведчика 854 артиллерийского полка 286 стрелковой дивизии. |
| 37. Лейтенанта ГУСЕВА-ЧЕПУРНОГО Александра Петровича. | Командира огневого взвода 65 отдельного зенитного артиллерийского дивизиона. |
| 38. Младшего лейтенанта ГУЖИНА Николая Григорьевича. | Командира роты 750 отдельного батальона связи 311 стрелковой дивизии. |
| 39. Ад"ютанта батальона ДАНИЛОВА Александра Кузьмича. | Ад"ютанта батальона 994 стрелкового полка 286 стрелковой дивизии. |
| 40. Военврача 3 ранга ДЕМИДОВА Виктора Павловича. | Старшего хирурга полевого подвижного госпиталя № 738. |
| 41. Красноармейца ДМИТРИЕВА Андрея Сергеевича. | Наводчика 849 артиллерийского полка 294 стрелковой дивизии. |
| 42. Красноармейца ДОЛГОПОЛОВА Ивана Александровича. | Красноармейца 994 стрелкового полка 286 стрелковой дивизии. |
| 43. Красноармейца ДОЛОТЕНКО Александра Федоровича. | Пулеметчика 994 стрелкового полка 286 стрелковой дивизии. |
| 44. Красноармейца ДЫДЫКИНА Ивана Григорьевича. | Разведчика артиллерийского полка АККУКС. |
| 45. Красноармейца ЕВСТРАТОВА Петра Дмитриевича. | Пулеметчика 994 стрелкового полка 286 стрелковой дивизии. |
| 46. Красноармейца ЕЛЬНОВА Ивана Ильича. | Красноармейца 883 корпусного артиллерийского полка. |
| 47. Военврача 2 ранга ЕМЕЛЬХОВСКОГО Алексея Васильевича. | Начальника головного эвако-приемника № 72. |
| 48. Младшего сержанта ЕРМАКА Николая Митрофановича. | Помощника командира взвода 1 батальона 1 отдельной горнострелковой бригады. |

## Ҡушымта 8



| | | | |
|---|---|---|---|
| 178. | Гвардии рядового | ЮНУСОВА Шайхутдина Юнусовича | Пулеметчика 7-го Отдельного Гвардейского мотоциклетного ордена Красной Звезды батальона. |
| 179. | Гвардии сержанта | ЮРИНА Петра Алексеевича | Шофера 7-го Отдельного Гвардейского мотоциклетного ордена Красной Звезды батальона. |
| 180. | Гвардии младшего сержанта | ЯГОДКИНА Константина Семеновича | Командира телефонного отделения Мотострелкового батальона 29-й Гвардейской мотострелковой Унечской орденов Суворова и Богдана Хмельницкого бригады. |
| 181. | Гвардии рядового | ЯКОВЛЕВА Николая Ивановича | Автоматчика взвода разведки 63-й Гвардейской танковой Челябинско-Петроковской Краснознаменной бригады. |
| 182. | Гвардии ефрейтора | ЯМБУЛАТОВА Байбулат Иждавлятовича | Автоматчика мотострелкового батальона 29-й Гвардейской мотострелковой Унечской орденов Суворова и Богдана Хмельницкого бригады. |

### МЕДАЛЬЮ-"ЗА ОТВАГУ"

| | | | |
|---|---|---|---|
| 1. | Гвардии сержанта | БЕДЕРМАНА Моисея Григорьевича | Командира хозяйственного отделения 152-го Отдельного Гвардейского орденов Богдана Хмельницкого и Красной Звезды батальона связи. |
| 2. | Гвардии младшего сержанта | ВЕТЧИНКИНА Ивана Петровича | Заведующего продовольственным складом 7-го Отдельного Гвардейского мотоциклетного ордена Красной Звезды батальона. |
| 3. | Гвардии рядового | ГОРБАЛЮК Михаила Остаповича | Радиотелеграфиста 7-го Отдельного Гвардейского мотоциклетного ордена Красной Звезды батальона. |
| 4. | Гвардии младшего техника-лейтенанта | ЕВГЕНЕНКОВА Михаила Федоровича | Старшего механика-водителя танка ИС-122, 72-го Отдельного Гвардейского Тяжелого танкового Львовского Краснознаменного полка. |
| 5. | Гвардии сержанта | ИВАНОВА Владимира Федоровича | Писаря мотострелкового батальона 29-й Гвардейской мотострелковой Унечской орденов Суворова и Богдана Хмельницкого бригады. |
| 6. | Гвардии сержанта | КРИЖАНОВСКОГО Николая Антоновича | Автоматчика 7-го Отдельного Гвардейского мотоциклетного ордена Красной Звезды батальона. |

ЦАМО РФ
ПАМЯТЬ НАРОДА

# Ҡушымта 9

2 Укр. Фронт

226

## Приказ

233 гвардейскому Стрелковому краснознаменному полку 81 гвардейской стрелковой Красноградской краснознаменной Дивизии.

„7." Октября 1944 года № 033/н Действующая Армия

От Имени Президиума Верховного Совета Союза ССР — награждаю:

### Медалью „За Отвагу"

1. Стрелка 1-стрелкового батальона — гвардии красноармейца Айсувакова Нигамат Зайнагатов. Ранее не награжденного.

В бою 28-августа 1944 года в районе Селения Валя-Узулуй (Трансильвания) действовал в составе своего подразделения смело и решительно вел активный огонь из своей винтовки по контратакующему противнику. и истребил 3х вражеских Солдат. В этом бою т. Айсуваков был ранен.

1908 года рождения, беспартийный, башкир. Призван в РККА Зилаирским РВК — Баш АССР Домашний адрес: [illegible]

2. Пулеметчика 1-стрелкового батальона — гвардии красноармейца Бондаренко Николая Павловича Ранее не награжденного.

В бою 28 августа 1944 года в районе Селения Валя-Узулуй (Трансильвания) Проявил мужество и отвагу, действовал в составе своего подразделения по отражению контратаки, где огнем из своего пулемета истребил 5-вражеских солдат. В этом бою т. Бондаренко был ранен.

[illegible] года рождения, член ВЛКСМ, Украинец, призван в РККА [illegible] РВК — Кировоградской области. Домашний адрес. [illegible]

3. Связиста 1-стрелкового батальона — гвардии красноармейца Богнюк Якима Васильевича — Ранее не награжденного.

В бою 28-августа 1944 года в районе селения Валя-Узулуй (Трансильвания) проявил отвагу и мужество, под сильным огнем противника устранил 3-порыва на линии, чем самым способствовал выполнению боевой задачи. В этом бою т. Богнюк был ранен.

1900 года рождения, беспартийный, Украинец. Призван в РККА [illegible] РВК, Одесской области. Домашний адрес. [illegible]

4. Стрелка 1-стрелкового батальона — гвардии красноармейца Белинского Ефима Федоровича. — Ранее не награжденного.

В бою 28 августа 1944 года в районе селения Валя-Узулуй (Трансильвания) действовал вместе со своим подразделением с отвагой и мужеством отражал контратаку противника и истребил огнем из своей винтовки 3х вражеских солдат. В этом бою т. Белинский был ранен.

1900 года рождения, беспартийный, Украинец, призван в РККА.

ЦАМО.РФ ПАМЯТЬ НАРОДА

**Ҡушымта 10**

**“ Хәрби хеҙмәттәре өсөн” миҙалы**
**Йәркәев Мөхәмәҙи Әхмәҙи улы**



Приказ подразделения
№: 157/н от: 14.09.1945
Издан: ВС 1 гв. ТА
Архив: ЦАМО
Фонд: 33
Опись: 687572
Ед.хранения: 1707
№ записи: 39819485

## Ҡушымта 11

### “Ҡыҙыл Йондоҙ” ордены

### Янбулатов Муллағәләм Мырҙамөхәмәт улы



Приказ подразделения
№: 27/н от: 31.05.1945
Издан: 16 гв. кд
Архив: ЦАМО
Фонд: 33
Опись: 686196
Ед.хранения: 7421
№ записи: 30091914